Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение
средняя общеобразовательная школа д.Тереклы
МР Архангельский район Республики Башкортостан

РАБОТА НА РАЙОННЫЙ КОНКУРС ТВОРЧЕСКИХ РАБОТ
«ХОЗЯИН ЗЕМЛИ»

в номинации «Есть такая профессия»

# «Рәхмәт һиңә, ер кешеһе»

Сочинение

Шарафутдинова Гузель Айбулатовна

14 лет
Учащаяся 8 класса

Багаутдинова Альмира Рафаиловна,
учитель башкирского языка и литературы

Контактная информация:
телефон: 8(34774) 24-3-14

bagautdinova.almira2011@yandex.ru

Һәм мин күрәм ерҙе кешеләрҙең

Хеҙмәт даны менән биҙәүен...

М.Тажи

Ер йөҙөндә төрлө һөнәрҙәр бар: экономист, уҡытыусы, инженер, юрист… Улар бик күп. Әммә һәр кем тормош юлын, һөнәрен үҙе һайлай. Берәүҙәр ҡоштар иркенлеге әйҙәр күккә ынтыла, икенселәрҙе зәңгәр киңлек – диңгеҙ әйҙәй, бәғзеләр һәр саҡ ярҙамға ашығыр аҡ халатлы табип һөнәрен үҙ итә. Бик аҙҙары ғына үҙенең киләсәген ер эше менән бәйләргә теләй. Мал ҡараусы, ер һөрөүсе, һауынсы ла бик кәрәкле һөнәр бит. Бөгөнгө көндә илдә ябай эшсе һөнәрҙәре талап ителә. Игенсе, тракторсы һөнәрҙәре бөгөнгө көндә лә бик актуаль. Колхоздар булмаһа ла, фермер хужалыҡтары ойошторол, ауылда ер алып, иген үҫтереп, мал үрсетеп йәшәргә мөмкин.

Фермер - ер кешеһе, ауыл эшсәне… Йылдың һәр миҙгелендә лә ал-ял белмәй ул. Тәбиғәт көйһөҙлөктәре, заман ҡаршылыҡтары менән көрәшә-көрәшә иген үҫтерә, мал үрсетә, аҙыҡ әҙерләй. Тыуған ергә ҡарата мөхәббәт, крәҫтиән хеҙмәтенә һөйөү тойғоһо юлындағы барлыҡ кәртәләрҙе йырып сығырға көс-ҡеүәт бирә төҫлө. Ә көҙөн иһә йыл әйләнәһенә дауам иткән көсөргәнешле алышҡа һөҙөмтә яһар минуттар етә.

Ер эше ауыр. Ерҙә тир түккән, крәҫтиән бурысына тоғро ҡалған уңғандар улар - фермерҙар. Фермер кешегә тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ кәрәк. Минең атайым Айбулат Шәрәфетдинов та шундай кеше. Ул - «Азамат» крәҫтиән – фермер хужалығы башлығы. “Ауыл кешеһе малһыҙ тора аламы һуң? Аҙбарға сыҡһаң, күңел күтәрелеп, йәнгә тыныслыҡ табып ҡалаһың. Ысынлап та, егәрле кешегә ауылда ла яҡшы йәшәргә мөмкин”, - тип иҫәпләй минең атайым Айбулат Фәрит улы.

1990 йылдарҙа колхоз – совхоздарҙың эшмәкәрлегендә ҡырҡа үҙгәрештәр барлыҡҡа килә. Атайым да башта “Баҡалды” совхозында водитель булып эшләй.

Аҙаҡтан ҡуртымға мал ала. Ата-олатайҙар мираҫына таянып, ер кешеһе булып ҡала. Әсәйем Гөлшат һәм олатайым Фәрит ярҙамында крәҫтиән - фермер хужалығы барлыҡҡа килә. Алдан «Арал» тип аталһа, 2005 йылдарҙан «Азамат» йәмғиәтенә күсеп китә.

Тәүҙә атайымдың өс һыйыры була, аҙаҡтан ун биш һыйырға еткерә. Әсәйем иртәле – кисле ҡул менән һауып көнөнә өс фляга һөт етештерә, берәүһен үҙебеҙ тотонһаҡ, ҡалған икәүһен быҙауҙарға эсерәбеҙ. Көҙөн үгеҙҙәрҙе иткә тапшырабыҙ, тана – һыйырҙарҙы тағын үрсетер өсөн алып ҡалабыҙ. Әлеге ваҡытта егерме башҡа тиклем күтәрелде. Хәҙер инде уларҙы аппарат ярҙамында һауабыҙ.

2000 йылдарҙа атайым ат үрсетеү менән дә эш башлай. «Оҡшамаһа – үрсетмәҫ инем. Мин кешеләрҙе һауыҡтырғым килә», - тигән һүҙҙәр менән ҡымыҙ эшкәртеү эшен башлай. Халыҡ яратып ала, эсә. Әлеге ваҡытта ҡырҡ баш ат һынала. Йәйен беҙҙе, балаларын, һыбай, ҡышын санала йөрөтәләр.

Бөтә малды ҡышлатыр өсөн атайым ике һарай төҙөй. Йәйен бесән әҙерләргә мәжбүр, яҡынса бер йәй эсендә 1500 ашыу рулон бесән әҙерләй. Техникалары ла өр-яңы. Бесәнде лә ҡул менән эшләмәйбеҙ. Ике трактор, косилка, бесән йыйғыс бар.

Бынан тыш атайым мәктәпкә, ауыл – район кешеләренә ярҙам ҡулын һуҙырға гел әҙер. Оло йәштәгеләр, Еңеү көндәрендә ауыл Советына, мәктәпкә, мәҙәниәт йорттарына бағымсылыҡ итә. Ҡулда техника бар икән, ауыл урамдарыын төҙөкләндереү эше менән дә ярҙамлаша.

Иген икмәк, йән сыҡмаҡ, ти халыҡ мәҡәле. Күпләп мал аҫрау ҙа йәнде сығармай ҡалмай. Был һөнәрҙең ауырлығын ошо эш һөнәр эйәләре генә яҡшы аңлай торғандыр. Улар өсөн ял миҙгеле юҡ. Йәйге эҫе йә сатлама һыуыҡ булһынмы, буран йә ямғыр булһынмы – фермер һәр ваҡыт эштә. Таң һарыһынан ҡара төнгә тиклем һуҙылған ауыр эш. Сәсеү, мал аҙығы әҙерләү, ураҡ эше булһынмы, хужалыҡ йәйләүгә күсһенме, ҡыш мал аҙығы ихатаһынан ҡураларға

бесән ташыһынмы… Бындай ауырлыҡтарға үҙ һөнәренә мөкиббән  һәм  йәне ергә ереккән кешеләр генә сыҙай алалыр. Ауыр тип, диванға салҡан ятып, түбәгә төкөргәндән генә мул тормош үҙенән - үҙе күктән төшмәй. Әсәйем Гөлшат һәм атайым Айбулат кеүек үҙен - үҙе аямаған, тырыш, донъясыл кешеләр генә барыһын да булдыра ала. “Үҙ шөғөлөңдө ятраһаң, уны күңелең менән башҡарһаң, эшең алға бара, еңел-елпе йөрөргә бер ҙә елкенмәйем”, - ти атайым. Район етәкселеге тырыш атайымдың хеҙмәтен юғары баһалай, Почет грамоталары, ҡиммәтле бүләктәр менән дәртләндерелә. Намыҫ менән башҡарған хеҙмәтеңде баһалауҙары, ауылдаштар хөрмәте эш кешеһенә ҡанат ҡуя, артабан да илһамланып хеҙмәт юлын дауам итергә этәргес була.

Эйе, башҡорт ир-егеттәре башҡаларҙан кәм-хур булырға тейеш түгел. Лайыҡлы ғүмер кисереп, рухи байлыҡты ла, матди хәстәрлекте лә ҡайғыртып йәшәгән ир-уҙаман атайым кеүек халыҡҡа оло бер үрнәк булырға кәрәк. Бер эштән дә ҡурҡып торорға ярамай. Үҙ эшеңде ятраһаң, тырышып эшләһәң, һөҙөмтәләр оҙаҡ көттөрмәҫ. Тыуған илеңә тырышып хеҙмәт ит – Тыуған илең дә быны лайыҡлы баһалар.

«Ер кешеһе» тип әйттеләр мине,
Шунан бөйөк исем-атым юҡ.
Ерҙә тыуҙым, үҫтем һәм йәшәнем,
Уны ҙурламаҫҡа хаҡым юҡ.

Ерҙә тир түккән, крәҫтиән бурысына тоғро ҡалған барлыҡ уңғандарға ҙур рәхмәт!